Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение
средняя общеобразовательная школа с.Нугуш
муниципального района Мелеузовский район
Республики Башкортостан

**РАССМОТРЕНО**
на заседании ШМО
Протокол № 1
_____Кинзябулатова Г.В.
«27» августа 2020г.

**СОГЛАСОВАНО**
Зам.директора по УР
__________ Занкина Н.В.
«28» августа 2020г.

**УТВЕРЖДАЮ**
Директор МОБУ СОШ с.Нугуш
__________ Габбасова Г. Ш.
Приказ № 83 от 28.08.20
«28» августа 2020г.

# Рабочая программа
# по башкирскому языку
# для 1 – 4 классов
## Уровень образования: начальное общее образование
## Срок реализации: 2020-2024гг.

**Составители:**
учителя башкирского языка и литературы
Габбасова Р.М.
Ямансарина М.Д.

**2020**

## I. Уҡыу предметын үҙләштереүҙең планлаштырылған һөҙөмтәләре.

**Шәхсән һөҙөмтәләр:**

- уҡыу эшмәкәрлегенә ыңғай ҡараш, белем алыуҙың шәхсән мәғәнәле булыуы;
- уҡыуҙың һөҙөмтәләре һәм үҙенең ҡылыҡтары өсөн яуаплылыҡ тойғоһо, үҙаллылыҡ;
- донъяны күп телле һәм мәҙәниәтле йәмғиәт булараҡ ҡабул итеү;
- башҡа халыҡтарҙың тарихына, мәҙәниәтенә, икенсе кеше фекеренә ихтирамлы ҡараш;
- матурлыҡ тойғоһо – тәбиғәт матурлығын күрә белеү, йәнле тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш;
- үҙеңдең һәм әйләнә – тирәңдәге кешеләрҙең ҡылыҡтарына дөрөҫ баһа биреү;
- мораль тәртип ҡағиҙәләрен көйләүсе этик тойғолар – намыҫлана, ғәфү үтенә, ояла белеү.

**Метапредмет һөҙөмтәләре:**

- төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте таба белеү (тотош текст, иллюстрация, схема, таблица);
- текстағы мәғлүмәттең бөтә төрҙәрен дә иҫәпкә алыу;
- тексты анализлау һәм синтезлай белеү;
- һүҙлектәр, белешмә материал менән файҙалана белеү;
- теге йәки был тема буйынса кәрәкле мәғлүмәт туплау, эҙләнеү эше алып барыу, презентация эшләй белеү;
- уҡыу маҡсаттарына ярашлы танып белеү эшмәкәрлегенең башланғыс формаларын үҙләштереү: эште планлаштырырға, эшләнгән эште контролләргә, баһаларға өйрәнеү;
- дәрестең темаһын һәм маҡсатын үҙ аллы әйтә белеү;
- уҡытыусы менән берлектә билдәләнгән баһалау критерийҙарына ярашлы үҙенең һәм иптәштәренең эшенә баһа биреү;
- үҙ фекереңде ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп әйтеү һәм уны яҡлай белеү;
- фекерҙе нигеҙләй белеү һәм дөрөҫ итеп башҡаларға еткерә алыу;
- дөйөм эшмәкәрлек барышында ҡарар ҡабул итә белеү.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

- үҙенең һәм йәштәштәренең эшмәкәрлеге, тирә-яҡ мөхит хаҡында үҙенең мөнәсәбәтен белдереп, бәйләнешле һөйләй белеү;
- уҡыған тексты аңлы һөйләү;
- шиғыр, тиҙәйткестәрҙе яттан һөйләй белеү;

- уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныуҙарына һәм йәш үҙенсәлектәренә тура килгән, өйрәнелгән тел материалы ингән аудиотекстарҙың йөкмәткеһен ишетеп аңлау.
- тыңлағанда һөйләм, һүҙбәйләнештәрҙе билдәләү, интонацияны айырыу
- логик баҫымдарҙы, һүҙ баҫымын дөрөҫ ҡуйып, тексты шыма, аңлы, дөрөҫ уҡыу
- текст буйынса иптәштәренә йәки уҡытыусыға һорауҙар биреү
- яҙыу техникаһына эйә булыу
- айырым һөйләмдәрҙе, бәләкәй текстарҙы үҙгәрешһеҙ, дөрөҫ итеп күсереп яҙыу
- өйрәнелгән материалға нигеҙләнгән өйрәтеү һәм һүҙлек диктанттарҙы яҙыу
- башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм ишетеү
- башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, этикет ҡағиҙәләрен белеү
- балалар фольклоры, текст һәм төрлө мәғлүмәт аша башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү
- башҡорт һәм рус телдәрендәге тел күренештәрен сағыштыра белеү
- белешмә материал, һүҙлектәр, компьютер һүҙлектәре менән файҙалана белеү
- рус теле дәрестәрендә текст менән эшләү тәжрибәһен башҡорт теле дәрестәрендә файҙалана белеү.

4 - се класты тамамлаған уҡыусы башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеп, төп башланғыс дөйөм белем биреү программаһын уңышлы үҙләштереп, түбәндәге уҡыу күнекмәләренә ирешергә тейеш:

1. һөйләгәнде йәки уҡығанды аңлай алыу (аудирование):

- уҡытыусының, иптәшенең һөйләгәнен, уҡығанын аңлай алыу;
- иҫәнләшеү, һаубуллашыу, рәхмәт әйтеү, ғәфү үтенеү, үтенесте белдереү,
- рөхсәт һорау (телмәр этикеты);
- тексттың йөкмәткеһе, ситуация буйынса һорау биреү;
- уҡыған текст буйынса, күҙәтеүҙәр нигеҙендә һөйләй белеү, ситуацияға ярашлы.

2. Һөйләшеү (говорение):

- һүҙлек һүҙҙәрен белеү, уларҙы дөрөҫ ҡулланып һөйләү;
- диалог төҙөү, төркөмдәрҙә һөйләшеү;
- үҙең, ғаилә ағзалары, уларҙың исемдәрен белеү, һөнәр-шөғөлдәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте һ.б. тураһында һөйләү,
- башҡорт теленән руссаға һәм киреһенсә тәржемә итеү.
- тексты дөрөҫ, шыма, талғын уҡыу (орфоэпик нормалар нигеҙендә),
- поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу,
- уҡыған тексттың йөкмәткеһен билдәләй алыу, персонаждарын әйтеү,
- текстан һорауҙарға яуаптар табыу, уҡып күрһәтеү.

3. Яҙыу (письмо):

- хәрефтәрҙе матур, дөрөҫ, тейешле кимәлдә тоташтырып яҙыу,
- ҙур булмаған тексты күсереп яҙыу,
- шундай уҡ текст буйынса йә картина нигеҙендә 2-3 һорауға яуап яҙыу,
- бирелгән ситуация буйынса 2-3 һөйләмдән торған текст яҙыу,

- ныҡлы әҙерлектән һуң өйрәтеү характерындағы һүҙлек диктаны яҙыу (программала
  күрһәтелгән нормалар күләмендә)

## II. Уҡыу предметының йөкмәткеһе

### 1 – се класс

**Танышыу – 3 сәғәт**
Танышыу. Һин кем? Был нимә? Әйҙә, танышайыҡ! Кемдеке? Хәрәкәт ҡылымдары. Нимә эшләй?
**Ғаилә – 3 сәғәт**
Ғаилә. [Әә] өн-хәрефе. Минең ғаиләм. [Өө] өн-хәрефе.
Үтелгәнде ҡабатлау. Кем менән?
**Мәктәп - 5 сәғәт**
Мәктәп. Нимәләр? [Уу],[Үү] өн-хәрефтәре. Уҡыу әсбаптары.
Ҡайҙа? һорауы. Мәктәптә. [Ҙҙ] өн-хәрефе.
Беҙ - уҡыусылар. Ни эшләй? һорауы.
Ҡабатлау. Ни эшләйҙәр? [Һһ] өн-хәрефе.
**Төҫтәр. Тиҙҙән Яңы йыл - 3 сәғәт**
Төҫтәр. [ҫ] өн-хәрефе. Яңы йыл килә. Ниндәй? һорауы.
Үтелгән темаларҙы ҡабатлау, нығытыу.
**Һандар - 2 сәғәт**
Беҙ һанайбыҙ. Нисә? Нисәнсе? Һандар. [Гг], [Ғғ] өн-хәрефтәре.
**Уйынсыҡтар - 6 сәғәт**
Мин уйнайым. Нимә менән? Уйынсыҡтар. Кем нимә ярата?
Эйәлек алмаштары. Кемдең? Нимәнең? Хәрәкәт ҡылымдары. [ң] өн - хәрефе. Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары. Ни эшләгеҙ?
Киҫәксәләр. Ни эшләмә? һорауы.
**Тән өлөштәре - 2 сәғәт**
Кешенең тән өлөштәре. Был нимә?
Хайуандарҙың тән өлөштәре. Ҡабатлау.
**Кейем - һалым. Аяҡ кейемдәре - 3 сәғәт**
Өҫ кейемдәре. Нимә? Ниндәй? Аяҡ кейемдәре. Ни эшләй?
Баш кейемдәре. Ҡайҙа?
**Йорт хайуандары һәм ҡоштары - 2 сәғәт**
Йорт хайуандары. Ни эшләй? Йорт ҡоштары. Ни эшләй?
**Ҡырағай хайуандар һәм ҡоштар - 4 сәғәт**
Ҡырағай хайуандар. Башҡорт өн - хәрефтәре.
Ҡырағай ҡоштар. Ни эшләй? Тикшереү эше.
Хаталар өҫтөндә эш. Үтелгәнде дөйөмләштереү.

### 2 - се класс

**Танышыу – 6 сәғәт**
Тыуған илем - Башҡортостан. Һин кем? Дәүләт символдары. Һинең исемең нисек? Республикала йәшәүсе халыҡтар. Һин ҡайҙа йәшәйһең? Милләттәр татыулығы. Ҡайҙа? Ҡайҙан? Һорауҙары. Үтелгән материалды нығытыу.
**Тән өлөштәре – 3 сәғәт**

Гигиена. Тән өлөштәре атамалары. Был нимә? Ни эшләй? Ни эшләмәй? Һорауҙары. Эйәлек алмаштарын ҡабатлау.

**Минең ғаиләм – 3 сәғәт**

Ғаилә ағзаларының атамалары. Бармы? Һорауы? Ғаилә ағзаларының һөнәрҙәре. Нимә эшләй? Һорауы. Минең ғаиләм. Башҡорт өндәрен ҡабатлау.

**Мин нимә яратам – 3 сәғәт**

Аҙыҡ – түлек атамалары. Нимә менән? Аш – һыу атамалары. Кем нимә ярата? Һауыт – һаба атамалары. Нимә менән?

**Минең уйынсыҡтарым - 4 сәғәт**

Мин уйнарға яратам. Нимә? Нимәләр? Яңы йыл байрамы. Нимә эшләйбеҙ? Уйынсыҡтар магазины. Ниндәй? Мин уйнарға яратам. Ҡышҡы уйындар. Нимә эшләбеҙ?

**Минең мәктәбем – 6 сәғәт.**

Көн дә мәктәпкә барам. Ниндәй? Мин уҡыусы. Кемдеке? Мин дәрестә. Ҡайҙа? Уҡыу әсбаптары. Нимә эшләйем? Көн режимы. Ни эшләй?

**Минең кескәй дуҫтарым – 3 сәғәт.**

Хайуандар һәм ҡоштар донъяһы. Был нимә? Йорт хайуандары. Ниндәй?

**Мин ял итәм – 6 сәғәт.**

Зоопаркта. Ҡайҙа? Ҡырағай йәнлектәр. Ҡайҙа йәшәй? Ҡырағай ҡоштар. Ҡасан? Ҡайҙа? Йорт хайуандары. Был нимә? Үтелгәнде ҡабатлау, нығытыу.

## 3 – сө класс

**Һаумы, мәктәп – 1 сәғәт**

1 сентябрь – Белем көнө. Башҡорт өн – хәрефтәре.

**Мин танышам - 3 сғәт**

Таныш булайыҡ. Һин кем? Республикала йәшәүсе милләттәштәр. Ҡайҙан? Башҡортостан – тыуған илем. Һин ҡайҙан?

**Мин белем алам – 4 сәғәт.**

Уҡыу әсбаптары. Был нимә? Ф Туғыҙбаева. Полиглот. Был һиндә бармы?
С. Әлибай. Өсөнсөләр. Нимәһеҙ?

**Мин һәм минең ғаиләм – 3 сәғәт.**

Ғаилә ағзалары атамалары. Кем нимә эшләй? Туғанлыҡ атамалары. Нимә эшләргә тейеш? Т. Дәүләтбирҙина. Әсәйемә. Нимә эшләргә тейеш?

**Мин һөнәр һайлайым – 3 сәғәт**

Р. Миннулин. Малайҙар. Кем ҡайҙа эшләй? Һөнәрҙәр. Кем ҡайҙа эшләй? Мин һөнәр һайлайым. Кем ҡайҙа эшләй?

**Мин тәбиғәтте яратам – 7 сәғәт.**

Нимә ул тәбиғәт? Нимә эшләйҙәр? Башҡортостан урманы. Нимәләр?
Дарыу үләндәре. Нимәләр? Нимә эшләйҙәр? Бөжәк атамалары. Ни эшләй? Беҙҙә ҡышлаған һәм йылы яҡҡа осҡан ҡоштар. Нимәләр?

**Минең яратҡан миҙгелем – 5 сәғәт**

Йыл миҙгелдәре. Ҡасан? Г.Батталова. Йыл миҙгелдәре (әкиәт). Нимә? Нимә эшләй? ТҮ дәресе. С Әлибай. Боҙбармаҡтар ниңә илай? Ф. Туғыҙбаева. Еләктәр. Көҙгө уңыш. Нимә эшләй?

**Минең гардеробым –2 сәғәт**

Кейем-һалым атамалары.. Ниндәй? Г. Юнысова “Яңы күлдәк”, “Сәскәле күлдәк”. Ниндәй?

**Минең тыуған көнөм – 1 сәғәт.**

Тыуған көн байрамы. Ҡасан?

**Мин сәйәхәтсе – 5 сәғәт**

Европа – Азия. Нимә менән? Нисек? Өфө урамында. Сәйәхәт. Нимә менән? Нисек? Телмәр үҫтереү.  Юл билдәләре. Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре. Тикшереү эше үткәреү, дөйөмләштереү.

**4 – се класс**

**Көн дә мәктәпкә барам – 5 сәғәт.** Белем көнө. Яратҡан дәрестәрем. Яҡын дуҫтарым. Мәктәп тормошо.

**Мин ғаиләмде яратам – 6 сәғәт.**Ғаилә ағзалары. Минең өйҙәге бурыстарым. Минең яратҡан шөғөлөм. Мин йәшәгән бүлмә. Минең кескәй дуҫтарым.

**Үҙем йәшәгән ер –  6 сәғәт.** Мин йәшәгән  йорт. Минең күршеләрем. Яратҡан урындар. Беҙҙең урам. Уйындар.

**Ауылда, ҡалала йәшәйем – 5 сәғәт.**  Минең тыуған ауылым. Башҡортостан ҡалалары һәм ауылдары. Тыуған ерем мөғжизәләре.

**Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо - 4 сәғәт.** Йәнлектәр. Бөжәктәр . Һауа торошон белеү.

**Төрлә хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ – 4 сәғәт.** Ҡыҙыҡлы хәлдәр. Мажаралар илендә. Хыял. Минең кумирҙарым.

**Һатып алырға өйрәнәм –4 сәғәт.**  Ғаилә бюджеты. Кейем һатып алыу. Модалы кейемдәр. Бүләк һайлау.

## III. Тематик планлаштырыу

| 1 се класс | |
|---|---|
| Танышыу | 3 сәғәт |
| Ғаилә | 3 сәғәт |
| Мәктәп | 5 сәғәт |
| Төҫтәр. Тиҙҙән Яңы йыл | 3 сәғәт |
| Һандар | 2 сәғәт |
| Уйынсыҡтар | 6 сәғәт |
| Тән өлөштәре | 2 сәғәт |
| Кейем – һалым. Аяҡ кейемдәре | 3 сәғәт |
| Йорт хайуандары һәм ҡоштары | 2 сәғәт |
| Ҡырағай хайуандар һәм ҡоштар | 4 сәғәт |
| 2 – се класс | |
| Танышыу | 6 сәғәт |
| Тән өлөштәре | 3 сәғәт |
| Минең ғаиләм | 3 сәғәт |
| Мин нимә яратам | 3 сәғәт |
| Минең уйынсыҡтарым | 4 сәғәт |
| Минең мәктәбем | 6 сәғәт |
| Минең кескәй дуҫтарым | 3 сәғәт |
| Мин ял итәм | 6 сәғәт |
| 3 – сө класс | |
| Һаумы, мәктәп | 1 сәғәт |
| Мин танышам | 3 сәғәт |
| Мин белем алам | 4 сәғәт |

| | |
|---|---|
| Мин һәм минең ғаиләм | 3 сәғәт |
| Мин һөнәр һайлайым | 3 сәғәт |
| Мин тәбиғәтте яратам | 7 сәғәт |
| Минең яратҡан миҙгелем | 5 сәғәт |
| Минең гардеробым | 2 сәғәт |
| Минең тыуған көнөм | 1 сәғәт |
| Мин сәйәхәтсе | 5 сәғәт |
| 4 – се класс | |
| Көн дә мәктәпкә барам | 5 сәғәт |
| Мин ғаиләмде яратам | 7 сәғәт |
| Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем | 5 сәғәт |
| Ауылда йәшәйем | 3 сәғәт |
| Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ | 5 сәғәт |
| Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ | 4 сәғәт |
| Һатып алырға өйрәнәм | 5 сәғәт |